Приложение №

МУНИЦИПАЛЬНОЕ КАЗЕННОЕ ОБЩЕОБРАЗОВАТЕЛЬНОЕ УЧРЕЖДЕНИЕ
ОСНОВНАЯ ОБЩЕОБРАЗОВАТЕЛЬНАЯ ШКОЛА д.АЙДАКАЕВО
МУНИЦИПАЛЬНОГО РАЙОНА БЕЛОКАТАЙСКИЙ РАЙОН РЕСПУБЛИКИ
БАШКОРТОСТАН

«Согласовано» Заместитель директора по УВР _____ /Казыева Л.М./ «_28_» _08_ 2020 г.	**«Утверждено»** Директор школы _____ / Хафизова Г.А. / «_28_» _08_ 2020г. приказ №74

МКОУ ООШ
д. Айдакаево

РАБОЧАЯ ПРОГРАММА ПЕДАГОГА
ПО ИСТОРИИ КУЛЬТУРЫ БАШКОРТОСТАНА

2-4 КЛАССЫ

2020 год

ПОЯСНИТЕЛЬНАЯ ЗАПИСКА

Настоящая программа по истории и культуры Башкортостана создана на основе нормативных документов, обеспечивающих реализацию программы ФГОС:

1) Федерального государственного образовательного стандарта ООО (приказ Минобрнауки РФ от 17.12.2010 года № 1897);
2) Приказа Минобрнауки от 31.12.2015 г. № 1577 «О внесении изменений в федеральный государственный образовательный стандарт основного общего образования, утвержденный приказом Министерства образования и науки Российской Федерации от 17 декабря 2010 г.
N 1897»

3) Приказа Минобрнауки «Об утверждении федеральных перечней учебников, рекомендованных (допущенных) к использованию в образовательном процессе в образовательных учреждениях, реализующих образовательные программы общего образования и имеющих государственную аккредитацию» (2013г,2014г.,2015.);
4) Приказа Минобрнауки от 21.04.2016г №459 «О внесении изменений федеральных перечней учебников, рекомендованных (допущенных) к использованию при реализации имеющих государственную аккредитацию образовательных программ начального общего, основного общего, среднего общего образования, утверждённый приказом Минобрнауки РФ от 31.03.2014г №253» в образовательных учреждениях, реализующих образовательные программы общего образования и имеющих государственную аккредитацию»
5) Примерной Основной образовательной программы ООО;

6) ООП НОО основного общего образования МКОУ ООШ д.Айдакаево(протокол №7 от 02.03.2020 г., приказ №19)

7) Учебного плана образовательного учреждения на текущий учебный год (протокол педсовета № 1 от 19.08.2020г.,приказ № 70).

8) Годового календарного графика образовательного учреждения на текущий учебный год (протокол №2 от 24.08.2020г., приказ № 71).

“Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте “ буйынса эш программаһы Рәсәй Федерацияһының дөйөм белем биреү буйынса икенсе быуын дәүләт стандарттары талаптарына, милли мәктәптәр өсөн эшкәртелгән уҡыу планына таянып ҡоролдо. Программаның нигеҙенә Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланылған Программа алынды, (авторы Бураҡаева М.С.,Юлмөхәмәтов, Өфө “Китап” 2011)

“Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте “ программаһы «Мәғариф тураһындағы законға», Рәсәй Федерацияһының икенсе быуын дөйөм белем биреү хөкүмәт стандарттарына, «Башҡортостан халыҡтары телдәре законы», «Башҡорт мәғарифын үҫтереү концепцияһы» һәм башҡа норматив документтарға таянып эшләнелде

“Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте “ дәрестәренә программаға һәм базис уҡыу планына ярашлы аҙнаға 1 дәрес, йылға 34 дәрес бүленә.

“Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте “ («Тормош һабаҡтары»)курсының төп бурыстары:

— Башҡортостан Республикаһында йәшәүсе бөтөн милләт вәкилдәре менән үҙ-ара татыу, дуҫтарса мөнәсәбәт булдырыуға булышлыҡ итеү; шул уҡ ваҡытта халҡыбыҙға күп һанлы милләттәр араһында йотолоп, юғалып ҡалмау, тиндәр араһында тиң тойоп йәшәү өсөн ниндәй йүнәлештә үҫергә кәрәклеген аңлатыу;

— тыуған төйәккә, башҡорттарҙың һәм Башҡортостан республикаһында йәшәүсе башҡа милләт вәкилдәренең мәҙәни ҡиммәттәренә ҡарата һөйөү һәм ҡыҙыҡһыныу уятыу;

— халҡыбыҙҙың матди һәм рухи байлығы менән таныштырыу;

— тәбиғәткә һәм тәбиғәт байлығына ҡарата һаҡсыл мөнәсәбәт тәрбиәләү;

— йәш быуынды ғаилә тормошона һәм үҙаллылыҡҡа әҙерләү;

— мәҙәниәт, сәнғәт, фән өлкәһендәге күренекле әһелдәребеҙ менән таныштырыу.

2. Уҡыу предметының дөйөм характеристикаһы

Тәрбиәле кеше, тәрбиәле быуын — тәрбиәле йәмғиәт,ышаныслы бөгөнгөбөҙ, өмөтлө киләсәгебеҙ ул. Шуның өсөн мәктәптәрҙә, гимназияларҙа һәм лицейҙарҙа, шулай уҡ башҡа уҡыу йорттарында ла төплө белем биреү менән бер рәттән уҡыусыла кешелеклелек һыҙаттары, әҙәплелек тәрбиәләү мөҡәддәс бурыс һанала. Ә кеше үҙ халҡының быуындан-быуынға күсә килгән рухи байлығына эйә булғанда, шул нигеҙҙә тәрбиә алғанда, физик камиллыҡҡа өлгәшкәндә һәм әхләҡи сафлыҡҡа ынтылғанда ғына үҙен тәрбиәле, әҙәпле, йәмғиәттең тулы ҡанлы ағзаһы итеп иҫәпләй ала. Фәҡәт сәләмәт рухлы кеше генә йәмғиәтебеҙ, халҡыбыҙ өсөн ниҙер эшләй, уның алға китеүенә тос
өлөш индерә ала.Ундай тәрбиәгә өлгәшеүҙә һәр халыҡтың үҙенең һыналған тәрбиә ҡанундары — халыҡ педагогикаһы ҙур роль уйнай.

Халыҡ педагогикаһы — кешелек донъяһы барлыҡҡа килгәндә үк тыуған ғилем. Һәр заман үҙе туплаған аҡыл, тәжрибә нигеҙендә үҙен алмаштырасаҡ быуынды һәйбәтерәк, зиһенлерәк, аңлыраҡ, юғарыраҡ зауыҡлы итеп тәрбиәләргә тырышҡан, уның өсөн бөтөн көсөн, белемен, тәжрибәһен һалған. Шул нигеҙҙә кешелек донъяһы үҫә, камиллаша, алғабара.

«Тормош һабаҡтары» халыҡ педагогикаһы нигеҙендә белем һәм тәрбиә биреүҙе системаға һалып, махсус программа буйынса алып барыла. Шул уҡ ваҡытта был предмет һәр баланың шәхси үҙенсәлеген дә, башҡорт халҡының милли үҙенсәлеген дә күҙҙә тотоп, тәрбиә мәсьәләһенә айырым иғтибар итеү мотлаҡ. Үҙ халҡы, милләте, тарихы өсөн ғорурлана алған, халыҡтың йыр-моңо күңеленә һеңгән, тыуған ерен ғәзиз әсәһе кеүек күргән, халҡының рухы, маҡсаты,уй-хыялдары, үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге менән йәшәгән һәм тыуған теленең ҡәҙерен белеп, уның

тотош байлығына эйә булып, шул телдә уйлаған, хыялланған, ижад иткән, үҙенең бөтөн булмышын халҡына бағышлаған кеше генә шәхес була ала.

Программала ҡаралған сәғәттәр һаны һәм бирелгән темалар мотлаҡ үтәлергә тейеш. Уҡытыусы был предметҡа ингән ҡайһы бер темаларҙы музыка, рәсем, хеҙмәт, тәбиғәт дәрестәре менән бергә үткәрә ала.

Уҡыусыла тыуған илгә, тыуған төйәккә, үҙ еренән күтәрелгән шәхестәргә һөйөү тойғоһо тәрбиәләү маҡсатында ошо төбәк тәбиғәтен өйрәнеүгә һәм күренекле әһелдәр менән танышыуға байтаҡ ҡына ваҡыт бүленә, экскурсиялар өсөн махсус сәғәттәр билдәләнә.

3. Уҡыу предметының уҡыу планында урыны.

Программаға һәм уҡыу планына ярашлы, 2-4 кластарҙа Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте предметына аҙнаға 1-әр сәғәт, уҡыу йылына 34-әр сәғәт бүленә

4. Предмет йөкмәткеһендә сағылыш тапкан ҡиммәттәр:

-**Ғүмерҙең ҡиммәте**- кеше ғүмерен иң юғары ҡиммәт итеп баһалау

-**Изгелектең ҡиммәте**- тирә-йүндәге кешеләргә миһырбанлы, ярҙамсыл, игелекле булыу

-**Ирек, намыҫ ҡиммәте**- аралашыу, үҙ-ара мөнәсәбәттәр ҡороу, ҡағиҙәләренең төп нигеҙе икәнлеген төшөндөрөү

-**Тәбиғәттең ҡиммәте**-үҙенде тәбиғәттең бер өлөшө итеп тойоу, тәбиғәткә ҡарата һаҡсыл мөнәсәбәтте нәфис әҙәбиәт һәм фәнни-популяр текстар аша тәрбиәләү

-**Ғаиләнең киммәте**-әҙәби белемдең йөкмәткеһе аша ғаиләгә, туғандарға ҡарата яҡшы мөнәсәбәт булдырыуға, ихтирам һәм яуаплыҡ, рәхмәтле булыу, яратыу тойғоларын формалаштырыуға булышлыҡ итеү

Хеҙмәттең һәм ижадтың ҡиммәте-балаларҙа хеҙмәткә һөйөү тәрбиәләүҙә уҡыу эшмәкәрлеге ҙур роль уйнай. Уҡыу предметының йөкмәткеһе аша балала маҡсатҡа ынтылыусанлыҡ,яуаплылыҡ, үҙ аллыҡ, хеҙмәткә һәм айырыуса яҙыусы хеҙмәтенә, ихтирам тойғоларын үҫтереү

-**Гражданлыҡ киммәте**- үҙенде йәмғиәттең, халыҡтың, илдең, дәүләттең ағзаһы итеп тойоу, илдең бөгөнгөһө һәм киләсәге өсөн яуаплылыҡ тойғоһо кисереү.Нәфис әҙәбиәт аша илдең, республиканың тарихына , мәҙәниәтенә, теленә, тормошона, халҡына ҡыҙыҡһыныу уятыу

-**Патриотлыҡ ҡиммәте**- Рәсәйҙе, Башҡортостанды һөйөү, уның үткәне һәм бөгөнгөһө менән ҡыҙыҡһыныу, Тыуған илгә хеҙмәт итергә әҙәр булыу

-**Кешелектең ҡиммәте**-уҡыусының үҙен Башҡортостандың, Рәсәйҙең генә гражданы итеп түгел, ә бөтөн донъяның бер өлөшө итеп тойоуы, шул донъя йәшәһен, алға китһен өсөн хеҙмәттәшлек, килешеп йәшәү, мәҙәниәттәр төрлөлөгөн ихтирам итеү.

5. Предмет өйрәнеүҙең шәхси, предмет, метапредмет һөҙөмтәләре

Баш ҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте предметын өйрәнеүҙең шәхси һөҙөмтәләре булып тора;

-Тыуған илгә, уның теленә, мәҙәниәтенә, тарихына һөйөү һәм хөрмәт

-Төрлө ситуацияларҙа йәштәштәре һәм ололар менән хеҙмәттәшлек күнекмәһе, конфликтлы һәм бәхәсле ситуацияларҙан сығыу юлын белеү

-хислелек, үҙенең хис-тойғоларынды аңлай һәм билдәләй белеү

-башҡа кешеләрҙең хис –тойғоларын аңлай һәм билдәләй белеү, уртаҡлаша алыу

-матурлыҡ тойғоһо- тәбиғәт матурлығын күрә белеү, йәнле тәбиғәткә һәксыл ҡараш

-нәфис һүҙҙең матурлығын тоя белеү, үҙенең телмәренде камиллаштырыуға ынтылыу

-ғаилә киммәттәрен аңлау, үҙенең яҡындарына ҡарата ихтирам, рәхмәт, яуаплылыҡ тойғолары

-текст авторы менән диалог ҡороуға ҡыҙыҡһыныу, уҡыуға ихтыяж

-үҙенең һәм әйләнә-тирәндәге кешеләрҙең ҡылыҡтарына дөрөҫ баһа биреү

-мораль тәртип ҡағиҙәләрен көйләүсе этик тойғолар-намыҫлана, ояла белеү, ғәйебеңде танып, ғәфү үтенеү.

Уҡыу предметының ***дөйөм (метапредмет)һөҙөмтәләре*** булып, универсаль уҡыу эшмәкәрлеген (УУЭ) формалаштырыу тора

Көйләүсе УУЭ (регулятивные УУЭ)

-дәрестең темаһын һәм маҡсатын үҙ аллы әйтә белеү

-уҡытыусы менән берлектә уҡыу проблемаһын сисеүҙең планын төҙөү

-ҡуйылған маҡсатҡа ирешеү өсөн планды тормошҡа ашырыу, кәрәк осраҡта үҙеңдең эшмәкәрлегеңә төҙәтмәләр индереү.

-уҡытыусы менән берлектә баһалау критерийҙарын билдәләү һәм шуға ярашлы үҙеңдең һәм иптәштәреңдең эшенә баһа бирә белеү.

Һөҙөмтәле уҡыу технологияһы һәм уҡыуҙағы уңыштарын баһалау технологияһы универсаль уҡыу эшмәкәрлеген формалаштырыу саралары булып тора

Танып белеү УУЭ(познавательные УУД)

-текстағы мәғлүмәттең бөтөн төрҙәрен дә иҫәпкә алыу

-уҡыу төрҙәрен маҡсатҡа ярашлы файҙаланыу, текст менән танышыу өсөн уҡыу, күҙ йүгертеп уҡып сығыу, мәғлүмәт алыу өсөн уҡыу ентекләп уҡыу

-төрлө формала бирелгән мәғлүмәтте таба белеү(тотош текст, иллюстрация, схема, таблица)

-мәғлүмәтте бер форманан икенсе формаға үҙгәртә белеү(план, схема, таблица төҙөү)

-һүҙлектәр, белешмә материал менән файҙалана белеү

-анализлай һәм синтезлай белеү

-сәбәп-һөҙөмтә бәйләнештәрен урынлаштыра белеү

-фекерләй белеү

Дәреслектең текстары һәм уның методик аппараты, һөҙөмтәле уҡыу технологияһы танып-белеү УУЭ үҫтереү саралары булып тора

Коммуникатив УУЭ (коммуникативные УУД)

-телмәр ситуацияһына ярашлы үҙеңдең фекереңде телдән әйтеү һәм яҙма формала бирә белеү

-телмәр сараларын төрлө коммуникатив мәсьәләләрҙе сисеүҙә дөрөҫ ҡулланыу, телмәрҙең диалогик һәм монологик формаларын яҡшы белеү

-үҙеңдең фекереңде нигеҙләй белеү һәм дөрөҫ итеп башҡаларға еткерә алыу

-башҡаларҙы ла ишетә һәм тыңлай белеү, уларҙың ҡараштарын аңларға тырышыу, кәрәк булғанда үҙеңдеңҡарашыңды үҙгәртә алыу

-дөйөм эшмәкәрлек барышында ҡарар ҡабул итә белеү

-һорауҙар бирә белеү

Икенсе класты тамамлаған уҡыусы донъяла төрлө телдә һөйләшеүсе генә түгел, ә йәшәйеше менән дә айырылып торған бик күп милләттәр барлығын, Тәбиғәт-Тәңре өсөн уларҙың бөтөнөһөнөң дә тиң булыуын, береһенең дә артыҡ та, кәм дә түгеллеген, шулай уҡ Рәсәй илендә йәшәүселәр Рәсәй иле, республикабыҙҙа йәшәүселәр**Башҡортостан Республикаһы Законына** ярашлы ла тиң хоҡуҡлы булыуҙарын аңлатырға. Һәр милләттең үҙ мәҙәниәтен, телен, традицияһын, тимәк, үҙен һаҡларға хоҡуғы барлығын белергә һәм зиһененә һеңдерергә тейеш.

6. Уҡыу предметының йөкмәткеһе

2 класс

№	Бүлектәр	Сәғәт һаны
1	Туғандарым– күңел нурҙарым.	1
2	Туғандар һәм дуҫтар.	10
3	Минең дуҫ-иштерәм.	4
4	Ысын дуҫлыҡ.	2
5	Уйын һәм уның әһәмиәте.	2
6	Ярҙам	2
7	Матурлыҡ.	1
8	Малайҙар.	1
9	Беҙҙең ҡыҙҙар.	1
10	Әсәй.	5
11	Ғаилә бәйләнештәре	3

.

3 класс

Бүлек	Дәрес темаһы
Минең тыуған яғымдың тәбиғәте 5 сәғәт	Тыуған яҡ
	Көҙгө иртә
	Көҙгө урман
	Ауылым
	Өфө – баш ҡалам
Тәбиғәттең гүзәл буяуҙары 6 сәғәт	Бесәндә
	Йондоҙҙар
	Таң атыу
	Көньяҡмы,төньяҡмы?
	Т.Ү. Инша “Ай”
	Дәрес-уйын
Башҡортттарҙың тәбиғәткә мөнәсәбәте 2 сәғәт	Башҡорттарҙың тәбиғәтте изгеләштереүе, йәнләндереүе һәм әҙәпкә өйрәтеүе
	Шатморат уйлана
Ҡоштар һәм йәнлектәр тормошо менән танышыу 7 сәғәт	Ҡалалағы ҡоштар тормошо
	Йәнлектәр тормошонан күренештәр
	Тыуған төйәктең билдәле урындары
	Яраҡан уйындарым
	Тәбиғәттәге һындар
	Башҡортостан тауҙары
	Башҡортостан йылғалары һәм күлдәре
Башҡортостан -Ватаным 10 сәғәт	Башҡортостан урмандары
	“Урал батыр” әкиәтенән

	Башҡортостанда дауаланыу урындары
	Башҡорттарҙың шифалы эсемлектәре
	Тәбиғәтте һаҡлау
	Тәбиғәт байлығын ишәйтеү
	Тәбиғәт байлығын һаҡлау
	“Һаҡлайыҡ тыуған ерҙе”. Дәрес - уйын
	Ағас ултыртыуҙың файҙаһы
	Тәбиғәт дошмандары
Тәбиғәт – беҙҙең тыуған йортобоҙ 3 сәғәт	Беҙ – тәбиғәт дуҫтары
	Беҙ – тәбиғәт дуҫтары. Дәрес – ярыш
	Тәбиғәткә экскурсия

4 класс

№	**Йөкмәткеһе**	**Һаны**
1	Башҡортостан- минең республикам	4
2	Республиканың баш ҡалаһы - Өфө	10
3	Республика байрамдары	4
4	Тел тураһында	2
5	Беҙ һәм башҡалар	9
6	Халыҡтар дуҫлығы	1
7	Сәнғәт оҫталарыбыҙ – донья сәхнәләрендә	3
8	Йомғаҡлау	1

7.Уҡыу йылы аҙағына планлаштырылған һөҙөмтәләр.

«Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте» курсын өйрәнеү һөҙөмтәһендә уҡыусы белергә тейеш:

1. Шәхси сифаттар:

1) Үҙ милләтен, Ватанын, тыуған яғын яратыу.

2) Этник һәм милли сағылышын таныу:

- Үҙаллылыҡҡа, белем алыуға етди һәм яуаплы ҡарау.
- Мәктәп һәм кабинет йыһаздарына, уҡыу әсбаптарына һаҡсыл ҡарау.
- Һаулыҡты нығытырға һәм һаҡларға.
- Атай-әсәйгә, тиҫтерҙәренә ихтибарлы һәм ихтирамлы булырға.

3) Ғаилә һәм йәмғиәт ҡиммәттәрен ихтирам итеү, үҙ аллы эшләү һәм үҙ эштәренә яуап бирергә әҙер булыу.

5) Динамик үҙгәреүсән һәм үҫтерешле донъяла үҙенең социаль ролен аңлау.

6) Әхлаҡ, социаль ғәҙеллек һәм ирек хаҡындағы ҡараштар нигеҙендә үҙ аллы үҫешкә һәләтле булыу.

7) Һәр саҡ этик тойғолар, ихтирамлылыҡ һәм эмоциональ-әхлаҡ һәм икенсе кешеләрҙең тойғоларын уртаҡлаша алыу.

8) Өлкәндәр һәм тиңдәштәре менән төрлө социаль хәлдәрҙә аҡыллы хеҙмәттәшлектең кәрәклеген аңлау һәм бәхәсле хәлдәрҙән сыға белеү.

9) Сәләмәт булыу һәм төрлө шарттарҙан хәүефһеҙ сығыу ҡағиҙәләрен үтәү.

2. Предмет һәләттәре:

1) Телде милли үҙаң нигеҙе булараҡ аңлау.

2) Башҡорт теле Башҡортостандың, рус теле Рәсәй Федерацияһының дәүләт һәм аралашыу теле булараҡ мәғәнәһен аңлау.

3) Дөйөм мәҙәниәт күрһәткесе, кешенең граждандлыҡ позицияһы булараҡ норматив телмәр һәм яҙма рус телен белеү.

4) Телмәр этикетына, аралашыуҙа төрлө тасуири тел сараларына эйә булыу.

5) Уҡыу өсөн үҙ аллы әҙәбиәт һайлап ала белеү, өҫтәлмә мәғлүмәт алыу өсөн мәғлүмәт сығанаҡтары менән файҙаланыу.

Тормош Һабаҡтары курсында ҙур темаларҙан һуң йомғаҡлау тикшереү эштәре үткәрелә. Ағымдағы тикшереү эштәре программаның өйрәнелгән материалын үҙләштереүҙе тикшереү маҡсатында уҙғарыла. Уларҙың төрө һәм үткәреү йышлығы өйрәнелә торған материалдың ҡатмарлылығынан, уҡыусыларҙың белем кимәленән сығып билдәләнә. Ағымдағы тикшереү эштәре өсөн уҡытыусы йә тотош дәресте, йә уның бер өлөшөн генә файҙалана ала.

Уҡыу йылы башында инеү , сирек һәм йыл аҙағында йомғаҡлау контроль эштәре үткәрелә. Тикшереү эштәрен сиректең беренсе көнөндә һәм дүшәмбелә үткәреү тәҡдим ителмәй.

Программа материалының үҙләштереү кимәле уҡыусыларҙың дәрестәрҙә телдән биргән яуаптарына һәм яҙма эштәренә ҡарап баһалана. Бының өсөн башҡорт мәҙәниәтенән һәр класта тикшереү эштәре, яҙма эштәр үткәреүҡарала.

9. Уҡыусыларҙың Баш ҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте буйынса белемдәрен һәм күнекмәләрен баһалау нормалары

Телдән яуаптарҙы баһалау:

Уҡыусыларҙың телдән һөйләмен, уның фонетик, грамматик яғы менән бер рәттән тасуири уҡыуы ла иҫәпкә алына. Телдән һорау формаһында үткәрелә торған күнегеүҙәр һәр дәрестә алып барыла.

Тыңлап аңлау күнекмәләрен баһалау:

1. “тулыһынса аңланы”
2. “өлөшсә аңланы”
3. “аңламаны”

Уҡыусының монологик һөйләүен баһалау:

1. - тәҡдим ителгән тема (рәсем, ситуация) буйынса хикәйә төҙөй белһә;
 - дөрөҫ интонация менән, тулы, эстәлекле итеп, тексҡа баһа биреп, мөнәсәбәтен күрһәтеп һөйләй алһа;
 - тупаҫ булмаған пауза хаталары ебәрелһә лә, **“5”ле** ҡуйыла.

4 -се класта бәйләнешле һөйләү – 10-12 һөйләмдән тәшкил итә.

2. - айырым паузалар, 1-2 һөйләм хатаһы яһаһа;
 - уҡытыусы тарафынан икенән артыҡ булмаған асыҡлаусы һорау бирелһә,”**4” ле** ҡуйыла
3. - теманың төп йөкмәткеһен асһа;
 - 4-6 һөйләү хатаһы ебәрһә;
 - уҡытыусы тарафынан икенән артыҡ асыҡлаусы һорау бирелһә йәки уҡытыусы ярҙамынан башҡа йөкмәткеһен һөйләүҙе башлай(тамамлай) алмаһа, **“3”лө** ҡуйыла.
4. - һөйләгәндә эҙмә-эҙлеклелек һаҡланмаһа;
 - паузаларҙа теүәлһеҙлектәр китһә;
 - 6- нан артыҡ һөйләм хатаһы һәм грамматик хата яһаһа, “**2”ле** ҡуйыла.

Диалогик һөйләмде баһалау:

1. - тейешле темпта дөрөҫ интонация менән һорау ҡуйһа;
- әңгәмәләшенең һорауҙарына тулы яуап ҡайтарһа, “**5”**ле ҡуйыла
2. - дөрөҫ һорау биреп, үҙе лә әңгәмәләшенең һорауына яуап бирһә,

ләкин һөйләү ваҡытында уҡытыусы ярҙамына мохтаж булһа;
- 2-3 һөйләм хатаһы ебәрһә, “**4”** ле ҡуйыла.
3. - уҡытыусы ярҙамында ғына һорау бирһә йәки яуап бирһә;
- һорауҙар биргәндә, һүҙҙәр һәм грамматик формалар табыуҙа теүәлһеҙлектәр ебәрһә йәки өйрәнгән теманың бер өлөшөн генә үҙләштерһә;
- 4-5 һөйләм хатаһы ебәрһә, **“3**” лө ҡуйыла.
4. - әңгәмә ваҡытында ҙур ауырлыҡ менән генә һорау бирһә;
- һорауҙарға үҙ көсө менән яуап бирә алмаһа;
- 6- нан артыҡ хата ебәрһә, “**2**” ле ҡуйыла.